**Тема: Икмәк үткән юл. Синонимдар. 5 класс (башҡорт  дәүләт теле).**

**Маҡсат:**

- «Синонимдар» темаһын өйрәнеүҙе дауам итеү;
- яңы һүҙҙәр үҙләштереп, һүҙ байлығын арттырыу;
- икмәккә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** дәреслек, ноутбук, мультимедиа проекторы, интерактив таҡта, карточкалар, һүрәттәр, икмәк, синонимдар һүҙлеге.

**Дәрес барышы:**

1. *Артикуляцион күнегеү:*
   Әсәйем мейескә һалһа,
   Алһыуланып ҡабара.
   Бешкәс өҫтәлгә ултыртһа,
   Татлы еҫтәр тарала.
   (М.Шиһапов)
   Башта шиғырҙы уҡытыусы уҡый, һуңынан хор менән уҡыу. Шиғыр нимә тураһында икәнлеген асыҡлау. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе тәржемә итеү. Аҫтына һыҙылған һүҙгә иғтибарҙы йүнәлтеү. Уны икенсе һүҙ менән алмаштырып буламы?(тәмле, теләңде йоторлоҡ). Ундай һүҙҙәр нисек атала? (синонимдар). Теманы билдәләү. Дәрескә маҡсаттар ҡуйыу. Дәфтәрҙәргә числоны, теманы яҙып ҡуйыу.
   *Баһалау биттәрен* таратыу. Уҡыусылар дәрестең һәр этабында үҙҙәрен баһалап бара.
2. Бөгөнгө дәрестә икмәк үткән юл буйлап үтеү тураһында хәбәр ителә.
   *1-се этап – иген сәсеү. Дәреслек менән эш*(12-се күнегеү 105-се бит).
   А) Һүҙлек эше:
   *иген – хлеба,*
   *сәсергә – сеять,*
   *өлгөрә – созревает,*
   *урырға – жать,*
   *һуғырға – молоть,*
   *он тартыу – молоть муку.*
   Һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү.
   Һүҙлек эшенән текст нимә тураһында икәнлеген фаразлау.
   Б) Тексттың авторы тураһында белешмә. Гөлсинә Абдулхаева(фото) Өфө ҡалаһыны 5-се лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.

В) Тексты уҡыу, тәржемә итеү, дәреслектәге һүрәттәргә тап килгән һөйләмдәрҙе табыу.

Г) Синонимдарҙы иҫкә төшөрөү, миҫалдар килтереү. Текста синонимдарҙы табыу (оҙаталар, ебәрәләр).

3. *2-се этап – көҙ көнө уралар. Интерактив таҡтала эш.* 2 төркөмгә бүленеп зур, тәмле һүҙҙәренең синонимдарын (оло, телеңде йоторлоҡ, эре, татлы, өлкән, шәрбәтле) йыйып алыу. Төркөмдәр бер-береһенең эшен баһалай.
4. *3-сө этап – элеваторға оҙатыу. Ял минуты:*

   Ҡунаҡтар килеүенә
   Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас,
   Бына шуундай тәпәш,
   Бына шуундай ҡабарған,
   Бына шуундай ҡыҫылған,
   Бына шуундай йәйелгән,
   Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,
   Шундай ҙур булды күмәс.
5. *4-се этап – ондо пекарняға килтереү. Синонимдар һүҙлеге менән эш.* Парҙарҙа эш. Синонимдар һүҙлегенән икмәк һүҙенең синонимын эҙләйҙәр, ҡайһы бер парҙар интернеттан эҙләй. Ҡайһы парҙың эше уңышлы булыр икәнлеген асыҡлау. Һығымта яһау. Әпәй һүҙенең диалект һүҙе булыуын асыҡлап китеү.
6. *5-се этап – икмәк бешереү. Эш дәфтәрҙәренең* 33-сө битендәге 2-се дәрестең 1-се эше. Аҙыҡ-түлектәрҙең ондан бешерелгәндәренең аҫтына һыҙырға. Тағы ондан ниндәй аҙыҡ бешерелгәнлеген асыҡлау.
7. *Дәрес буйынса алған белемдәрен тикшереү. Тест* һорауҙарына яуап биреү:

   1) Мәҡәлдең икенсе яртыһын табырға: ***Икмәк бөтәһенә лә ...***

   а) Муйын, б) ҡул, в) баш.

   2)Ниндәй юлда синонимдар дөрөҫ бирелгән?

   а) Ҙур – бәләкәй, б) тәмле – телеңде йоторлоҡ, в) икмәк – ҡалас.

   *3)Урыу* һүҙенең тәржемәһен табырға:

   а) Сеять, б) жать, в) созревать.

   *Рефлексив анализ:* Бөгөн дәрестә ... ауыр булды, ... ҡыҙыҡ булды, ...иҫемдә ҡалды, ...мин өйрәндем.

   *Йомғаҡлау:* Икмәктән оло аҙыҡ юҡ. Һуғыш ваҡытында ул кешеләрҙе аслыҡтан ҡотҡарған. Уның бер валсығын ғына ла әрәм итергә ярамай, ҡалған икмәк һыныҡтарын, валсығын ҡоштарға бирергә кәрәк.

Бөгөнгө дәрестән күреүебеҙсә, икмәк өҫтәлгә килеп еткәнсе, бик оҙон юл үтә. Икмәккә һаҡсыл ҡарашта булырға тейешбеҙ.
*Өй эше:* “Икмәк – бөтәһенә лә баш” темаһына проект эше (һүрәт, шиғыр, инша, әкиәт, презентация, стенгазета һ.б.).
*Баһалау* биттәре буйынса балдарҙы һанау, баһалау.